*Риф МИФТАХОВ*

*Наркоманияны, эскелекте һәм тәмәке тартыуҙы иҫкәртеү йылына ҡарата*

# Шарап яуы

**Поэма**

Тағы бер ҡыш үтер,
Яҙ ҡанатын ҡағыр,
Ғәзиз төйәк —
Мәктәп баҡсаһына —
Ояларға ҡайтыр сыйырсыҡтар.
Һыҙғырырҙар,
Бала сығарырҙар,
Һәм яңынан,
Һары көҙ етеүгә,
Ҡанат аҫтарында ҡанатланған
Ҡошсоҡтарға тормош бүләк итеп,
Оҙон юлға сәфәр сығырҙар.
Ҡошҡынамы?
Күпме йән эйәһе
Бала өсөн йәшәй, көрәшә...
О, кешеләр, һеҙ ҙә ҡош-йәнлеккә
Алһағыҙсы ҡай саҡ тиңләшә!

Әлегә ҡыш...
Ҡар йырҙары
Балаларҙы тышҡа саҡыра:
Айһылыуҡай аҡ бармағы менән
Тәҙрәләргә сиртә һаҡ ҡына.
Сиртә лә бит,
Алтынсылар бөгөн
Инша яҙа тирләп, уйланып...
Тик бер Айҙар ғына
Яҙмай бына,

Ултыра ул яңғыҙ моңланып.
Ниңәлер ул ”Беҙҙең ғаилә” тигән
Күптән көткән таныш иншаны
Үҙһенмәне...
Ә бит дуҫтарына
(Ҡара йөҙҙәренә!)
Ана нисек тема оҡшаны!
Мөғәллимә тик һоҡланып ҡарай
Алты малай һәм дә ун ҡыҙға:
Һәр береһе ата-әсәһенә
Мөхәббәтен түгә ҡағыҙға.
Ә Айҙарға улар тураһында
Нимә генә уйлап яҙырға?..

Мөғәллимә кеүек, мин дә, Айҙар,
Бер төрлө лә һорау бирмәйем.
Һин йәшәгән ғаилә тураһында
Ябай ғына хәлде һөйләйем.

Табыштылар,
Ҡауыштылар бер мәл.
Ерҙә иртә иркә яҙ ине.
Ғашиҡтарҙың көләс йөҙ-күҙендә,
Йөрәгендә бары наҙ ине.
”Ғүмер буйы — мәңге бергә!” тигән
Теләктәре һәр бер һүҙҙәрендә,
Эҙҙәрендә хатта бар ине.
Вәғәҙәләште улар — ир һәм ҡатын —
Ҡыйыу Фәни, һылыу Фәниҙә:
”Балаларға һәм дә башҡаларға,
Булырбыҙ үрнәк һәр ерҙә!
Ошо уйҙан, ошо ихтыярҙан
Айыралмаҫ беҙҙе бер ни ҙә!..”

Вәғәҙә — иман,
Ләкин был йәш ғаилә
Иман итте хәмер-йыланды.
Айҙар тыуғас, улар аҙна буйы
”Бала йыуып” көн-төн йыуанды.
Был ҡыуаныс китте ай буйына,
Унан инде — йылдар дауамы...
Ир ирәйҙе, ҡатын өндәшмәгәс,
Булды көн-төн ғаилә байрамы.
Шундай тормош улар һайланы:
Бар тапҡанды ”мәй”гә яйланы.

Ҡайҙа хәмер — шунда тупаҫлыҡ,
Ҡайҙа хәмер — унда йәбер ҙә.
Тора-бара ыҙғыш, талаш, тартыш
Бер ғәҙәткә инде был өйҙә.
Кемдең ҡасан имен ҡалғаны бар
Эйәләтеп хәмер-йыланды?!
Күкрәктәрҙә йылыныусы туҙбаш,
Аң-аҡылды сағып,
Уянды...
Һәм быуҙы ул,
Быуҙы йәш ғаиләнең
Вәғәҙәһен, килер бәхетен.
Ағыуланы һәм ташланы аҫка
Балалыҡтың алтын тәхетен:
Йәмһеҙ һүҙҙән,
Яман ҡараш-күҙҙән,
Асығыуҙан көн-төн ҡыйылды.
Ҡотһоҙ өйҙөң һалҡын мөйөшөнә
Нисә тапҡыр Айҙар һыйынды...
Ә мәктәпкә төшкән бер йылды
Атай кеше (әллә ултырттылар?)
Өйҙән китеп, ҡапыл юҡ булды...
Тик малайға донъя үҙгәрмәне:
Әсәй кеше бөтөн тапҡанды
Тамағына ҡойоп: ”Эсәм хәҙер
Хәсрәтемдән!..” — тиеп аҡланды.

”Шарап яуын” әҙәм еңәме һуң,
Тәҡдир итеп ҡуйғас һәр ерҙә?
Шул ағыуҙан аңһыҙланды Фәни,
Шул ағыуҙан бөлдө Фәниҙә.
Улар ғынамы ни?!
Күпме йәндәр
Һәләк була ошо ағыуҙан...
Ана шуға ҡурсалайһы килә
Саф йөрәктән,
Асыу-ярһыуҙан
Барығыҙҙы:
Бәлки, берегеҙҙе
Ҡурсалармын хата аҙымдан...
Иншаларым күптән яҙылһа ла,
Һеҙҙең менән мин дә, алтынсылар,
Тыйылалмам шулай яҙыуҙан:
Шаярмағыҙ шарап менән,
Уның менән шаярғандар,

Ғүмер буйы хөр булам тип,
Ғүмер буйы хур булғандар.
Ул ҡотортһа, ул ҡоторһа,
Юҡҡа сыға аҡыл-аңдар.
Арыҫланды тотоп менер
Ирҙәр хәлһеҙ йығылғандар.
”Шарап яуын” еңә алмай
Күпмеләре юғалғандар:
Был донъяла ут яуынан
Ҡырылғандан күберәк улар.
Шарап яуы — хәрәм яуы
Ҡатын-ҡыҙға икеләтә:
Нисек мөмкин сабыйҙы ла,
Шешәне лә күтәрергә
Бер ҡорһаҡта, йән-йөрәктә?!
Имеҙергә бер күкрәктә?!

Үлем сәскән аждаһанан
Ҡотолорға батша, хандар,
Президенттар һәм хакимдар
Ниндәй әмер бирмәгәндәр,
Ниндәй бойороҡ яҙмағандар.
(Һәләкәтен аңлағандар!)
Тик ҡотола алмағандар...

Эй, кешеләр, дуҫ-туғандар!
Хәмер яуы ҡылысына
Торамы ни ғәзиз баштар?!
Үҙ йәнеңде үҙең урлау —
Буламы һуң был тормошта
Шул хәлдән дә түбән хурлыҡ?!
Азат килеш — мәңге ҡоллоҡ...
Ҡайҙа беҙҙә Кеше тигән
Ирлек,
Ҙурлыҡ һәм
Ғорурлыҡ?!

Кисерегеҙ, өгөт-нәсихәткә
Төшөп китһә йырым — поэмам.
Яҙыҡлыҡҡа, хәйер, кермәйҙер ул
Бала яҙмышына ҡағылған.
Айҙар, Айҙар...
Унын хаҡындағы
Уй-хәсрәтем оҙаҡ үтмәҫме?

Үсә төшкәс, был бала ла, тием,
Шул хурлыҡлы юлдан китмәҫме?..

Оҙаҡламаҫ, яҙ ҡанатын ҡағыр,
Ғәзиз төйәк —
Мәктәп баҡсаһына —
Ояларға ҡайтыр сыйырсыҡтар.
Әсә менән ата хәстәренән
Ҡанатланыр күҙгә ҡошсоҡтар —
Сәфәрҙәргә бергә сығырҙар...

Эй, кешеләр, беҙ ҙә
ҡош-йәнлектән
Булмайыҡсы түбән!
Уйлайыҡ:
Йәнебеҙҙе ен-шайтанға һатып,
Шешә төптәрендә булмайыҡ!
Беҙ булайыҡ иң-иң яҡындарҙың
Яндарында,
Ҡосаҡтарында!

Бәлә сүпрәләре әсетмәйек,
Ижад ҡомарлығы үҫтерәйек
Балаларҙың аҡыл-аңында!
Быуындарҙан-быуындарға күсә,
Юлыҡтыңмы шул үт-үләткә.
Әҙәм баштарына менгән һайын
Фажиғә ул бөтә милләткә.
Милләт көсө — рухи уяулыҡ ул,
Милләт көсө — аҡыл, айныҡлыҡ.
Нык тора ул ерҙә,
Булмай үрҙә
Һәр үткенсе елдән ауырлыҡ!
Тән-йәндәрҙе беҙҙең илһамлаһын
Бәхет,
Ижад,
Ҙурлыҡ,
Шағирлыҡ!..

Эй, уҡыусым, кисерерһең инде,
Нисек кенә яҙмам сыҡмаһын:
Яҙҙым бары выждан ҡушҡанын!
Бар теләгем:
Килер быуындарҙан
Һәр бер бала яҙһын иншаһын...